# ХАЛЫҠ МЕНӘН БӘЙЛӘНЕШ НЫҒЫЙ

*Азат ЗАРИПОВ,*
*Октябрьский њалаєы хакимиүте башлыҒы урынбаңары*

*Беҙҙең республикала урындағы башкарма власть органдарында мәғлүмәт-аналитик бүлектәр һәм идаралыктар күптән түгел генә барлыкка килде. Улар үҙ алдарына куйылған бурыстарҙы үтәүҙә тәүге аҙымдарҙы ғына яһай әле. Был йәһәттән Октябрьский калаһы хакимиәте каршыһындағы мәғлүмәт -аналитик идаралыктың эш тәжрибәһе иғтибарға лайык. Ул аналитик мәғлүмәт йыйыу һәм эшкәртеү, уны халыкка еткереү менән шөғөлләнә. Шуныһын да әйтергә кәрәк, Октябрьскийҙа иң беренсе булып территориаль мәғлүмәт-аналитик система индерелде.*

*Шул эште йәйелдереүҙә тәүге аҙымдары хакында һөйләүен һорап, кала хакимиәте башлығының кадрҙар буйынса урынбаҫары Азат Баян улы Зариповка мөрәжәғәт иттек.*

— Тәүҙә мәғлүмәт-аналитик идаралыҡтың штатында өс кеше ҡаралған ине, — тине ул. — Һуңынан был эштең мөһимлеген аңлап һәм үҙебеҙҙең мөмкинлектәрҙән сығып, уға тағы бер кеше өҫтәнек. Әҙерлекле белгестәр менән тулыландырғандан һуң был идаралыҡтың төп эш йүнәлештәрен билдәләнек. Әлбиттә, беҙ тәү сиратта идара итеү органдарының эшендә билдәлелекте көсәйтеү, шул хаҡта мәғлүмәтте халыҡҡа еткереү, йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү, власть менән халыҡ араһында бәйләнеште нығытыу бурысын ҡуйҙыҡ. Үҙ эшмәкәрлегендә идаралыҡ киң мәғлүмәт саралары менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеүгә ҙур әһәмиәт бирә. Ә беҙҙең ҡалала өс гәзит сығарыусы типография һәм телерадиотапшырыу станцияһы эшләй. Журналистарға тулыраҡ мәғлүмәт биреү өсөн беҙ иң мөһим темаларға матбуғат конференциялары үткәреүҙе практикаға индерҙек.

Эштең асылына килгәндә, был система яҡын киләсәктә беҙҙең хакимиәттең ”мейеһенә” әйләнәсәк. Ул ҡалалағы бөтә предприятиелар һәм учреждениеларҙы бер селтәргә бәйләйәсәк, беҙ — уларҙан, улар беҙҙән тулы мәғлүмәт алып торасаҡ. Ҡалала төрлө сығанаҡтарҙан йыйылған мәғлүмәттәрҙең базаһы барлыҡҡа киләсәк. Беҙ шуларға анализ яһаясаҡбыҙ һәм үҙебеҙҙең эштә уны киң файҙаланасаҡбыҙ. Икенсе



*Азат Баян улы Зарипов 1956 йылда Ворошиловград калаһында тыуған. Башкорт дәүләт университетының география факультетын (1983) һәм идара итеү һәм иктисад институтын тамамлаған (1998).*

*Хеҙмәт юлын Октябрьский калаһының 10-сы урта мәктәбендә хәрби етәксе булып башлай. 30-сы техник училищела комсомол комитетының секретары вазифаһын үтәй. Артабан коммуналь-төҙөлөш техникумының көндөҙгө бүлеген етәкләй, Техниктар йортоноң директоры була. 1987—1990 йылдарҙа — КПСС-тың Октябрьский кала комитетының ойоштороу бүлеге инструкторы, ”БЖК” производство берекмәһенең партком секретары. Артабан “ОЗОНИГ ЛУКОЙЛ” берекмәһенең дөйөм мәсьәләләр буйынса генераль директор урынбаҫары булып эшләй.*

*1996 йылдан кала хакимиәте башлығының урынбаҫары вазифаһын аткара.*



08-2001.p65 32 21.08.01, 11:03
Black

төрлө әйткәндә, беҙ мәғлүмәт менән тәьмин итеүҙә бөтөнләй яңы дәрәжәгә, йәғни Көнбайышта ҡабул ителгән стандарттарға сығасаҡбыҙ. Телефонограмма биреп ултырыуҙың кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Предприятиелар менән хакимиәт араһында электрон почта эшләй башланы ла инде. Беҙ бөгөн үк Башҡортостандың көнбайышында иң ҡеүәтле локаль селтәрҙәрҙең береһенә эйәбеҙ. Әле уға хакимиәттәге 32 компьютер тоташтырылған. Интернетҡа сыға алабыҙ. Шулай уҡ беҙҙе БР Министрҙар Кабинетының серверына тоташтырҙылар. Тимәк, ундағы хоҡуҡи мәғлүмәт тә беҙҙең өсөн асыҡ.

Әлегә был системаға иң эре предприятиелар генә инһә, яҡын киләсәктә уларҙың һаны йөҙгә туласаҡ. Әле шул локаль селтәр өсөн ҡаланың, һәр предприятиеның паспортын әҙерләйбеҙ. "Экспресс" мәғлүмәт үҙәге менән берлектә беҙ Интернетта ҡаланың сайтын астыҡ. Хәҙер донъяның теләһә ҡайһы мөйөшөндә Октябрьскийҙың тарихы, беҙҙәге дәүләт власы структураһы, эре предприятиелар хаҡында мәғлүмәт алырға мөмкин. Тиҙҙән үҙебеҙҙең сайтта иғландар таҡтаһы булдырыласаҡ, был инде ҡалала йәшәгән кешеләргә Интернет аша үҙ тауарын һатыу, алыш-биреш итеү мөмкинлеген бирәсәк.

Кешеләрҙең хакимиәткә күберәк юридик характерҙағы хаттар менән мөрәжәғәт итеүҙәрен иҫәпкә алып, идаралыҡта "Ҡыҙыу телефон" үткәрергә булдыҡ. Һәр шишәмбе көн ҡалала йәшәгән һәр кем үҙенең һорауҙарын бирә ала. Уларҙы беҙ белгестәргә еткерәбеҙ, ә яуаптарҙы "Октябрьский нефтяник" гәзите биттәрендә баҫып сығарабыҙ. Әгәр ҡайһы бер һорауҙар кешеләрҙең үҙенә генә ҡағыла икән, белгестәр уға хат аша яуап бирә. Беҙгә килгән бер генә мөрәжәғәте лә иғтибарһыҙ ҡалдырмайбыҙ.

Беҙҙең аналитиктар алдында йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү, социологик тикшереүҙәр үткәреү буйынса ҙур эш тора. Әммә тормошобоҙ күп яҡлы булған кеүек, аналитиктар өсөн дә эш алымдарының иге-сиге юҡ. Заман шуны талап итә.



08-2001.p65 33 21.08.01, 11:03
Black